*Мәксүт СОЛТАНОВ,*
*Ҡыйғы районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе*

# ҮҘ АСЫЛЫБЫҘҒА ҠАЙТАБЫҘ

1996 йылда Ҡыйғы районы башҡорттарының беренсе ҡоролтайы булды. Ошо ҡоролтайҙа 13 кешенән торған башҡарма комитет төҙөлдө. Уның эргәһендә милли мәҙәниәтте үҫтереү, милли кадрҙар әҙерләү, башҡорт телен үҫтереү, йәштәр сәйәсәте буйынса ассоциациялар эшләй. Ултырыштар район алдындағы мөһим мәсьәләләргә арнала, ҡарарҙар ҡабул ителә, уларҙың үтәлеше күҙәтеүгә алына.

Һуңғы йылдарҙа Йүкәлекүл, Кандаковка, Дүшәмбикә урта мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыла башланы. Башҡорт ауылдарында балалар туған телендә белем ала.

Һәр бер башҡорт ауылында ауыл ҡоролтайҙары үткәрелеп, аҡһаҡалдар ҡорҙары, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ойошмалары төҙөлдө һәм уларҙың рәйестәре һәм ағзалары һайланды. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә эшләнелгән эштәргә иғтибар итеп, шуны әйтергә була: әгәр ҙә башҡорт халҡының зыялылары күп мәсьәләләрҙе үҙ ҡулына алһа, башҡорт телен уҡытыу, Башҡортостан тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеү, үҫтереү, музейҙар булдырыу, эскелеккә ҡаршы көрәш, гәзит-журналдарға яҙылыу һымаҡ мөһим мәсьәләләр ыңғай хәл ителәсәк. Күп мәктәптәрҙә Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте уҡытыла, райондың «Район тормошо» гәзите биттәрендә тыуған яҡҡа, мәктәп балаларына бағышланған материалдар баҫыла һәм йәш хәбәрселәрҙең мәҡәләләре гәзит биттәрендә даими сығып тора. Үҫмерҙәрҙең өлкәндәр фәһем алырлыҡ фекерҙәре ҡыуандыра.

Һуңғы ваҡытта «Йәш ғаилә», «Өлгөлө ғаилә», «Ҡаҙ өмәһе», «Гармун моңо», «Балалар һабантуйы», Ураҙа, Ҡорбан байрамдары тергеҙелде.

1999 йылда Абзай ауылында «Һаумыһығыҙ, яҡташтар!» тигән сара үтте. Яҡташтарыбыҙ — дәүләт секретары, БР Дәүләт Йыйылышының Вәкилдәр Палатаһы депутаты Илдус Әҙеһәмов, РФ Дәүләт Йыйылышы депутаттары Рәғиб Ғимаев, Франис Сәйфуллин, БР ауыл хужалығы һәм аҙыҡ-түлек министрлығы вәкиле Ғәләлетдин Фассалов, техник фәндәр докторы, профессор Сафа Әхмәтов, Башҡортостандың халыҡ артисткалары Гүзәл Сәғитова, Рәмзиә Хисамова, Миңлеғаян Сафина һәм район күләмендә эшләгән абруйлы кешеләр ҡатнашлығында башҡорт халҡының ҡунаҡтарҙы ҡаршылау йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре күрһәтелде. Бындай оло байрам Абзай ауылы халҡы өсөн генә түгел, тотош район өсөн дә иҫтәлекле ваҡиғаға әйләнде.



Ошо уҡ йылда Ҡыйғы районы хакимиәте, ауыл ҡоролтайы һәм аҡһаҡалдар ҡоро ағзалары Иҙрис ауылында тыуып-үҫкән РСФСР-ҙың һәм Башҡортос-

тандың халыҡ артисы Ғималетдин Минһажевтың тыуыуына 110 йыл тулыуҙы үткәреүҙе ойошторҙо. Унда БР Президенты Аппаратынан, Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙан, республика баҫмаларынан вәкилдәр ҡатнашты. Шул уҡ ваҡытта Ғималетдин Минһажев исемендәге Ҡыйғы башҡорт халыҡ театрының 65 йыллығы ла билдәләнде. Байрамға Ғималетдин Минһажевтың ҡыҙы Сара апай ҙа килгәйне. Өфө ҡунаҡтары ҡатнашлығында Үрге Ҡыйғы ауылында музей асыу тантанаһы булды. Ғималетдин Минһажев сәхнәлә кейеп уйнаған елән музейға экспонат итеп тапшырылды.

Йосоп ауылы зыялылары, ҡоролтай ағзалары, аҡһаҡалдар һәм аҡ әбейҙәр ҡорҙары тырышлығында «Ултырайыҡ әле бөгөн кис», «Йома сәйе», Ураҙа, Ҡорбан, Мәүлит байрамдарына арналған кисәләр уҙғарыла. Ваҡыты-ваҡыты менән тирмә күргәҙмәһе асыла: халыҡ оҫталарының ҡулдан эшләнгән әйберҙәре күрһәтелә, башҡорт тирмәһенең бөтә атрибуттары ҡуйыла. Ололар йәш быуынға нисек ҡымыҙ бешеүҙәрен, тал сыбығынан ҡаҙ, тауыҡ оялары үргәнен, сана, арба, дуға бөгөүҙәрен, таҫтамал, балаҫ, келәм һуғыуҙарын күрһәтә. Һуңынан башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының район семинары уҙғарылды.

Ибрай ауылының «Серҙәштәр» төркөмө Өфө, Силәбе өлкәһенең Һатҡы ҡалаһы мосолмандары алдында сығыш яһап, ҡурай, ҡумыҙ, гармун моңдары, сәсәндәрҙең ҡобайыр әйтеүҙәре, бейеүселәрҙең дәртле бейеүҙәре, йыраусыларҙың боронғо йырҙары, аш-һыу оҫталарының тәмле аштары менән халыҡты хайран ҡалдырҙы.

Ауылдарҙа хужалыҡтарҙың ҡаҙаныштарына йомғаҡ яһау, хеҙмәт алдынғыларын бүләкләү, мәҙәниәт өлкәһендәге үҫеште барлау үҙе бер күркәм йола. Һабантуйҙарҙа тирмәләрҙең биҙәлешен, атрибуттарын, әҙерләнгән аш-һыуҙарҙың тәмен татып баһалау матур традицияға әүерелде. Унда башҡорт ҡоролтайы ағзалары әүҙем ҡатнаша.

Тормош ауырлыҡтарына ҡарамаҫтан, ауылдар төҙөкләндерелә, район үҙәгенән ситтә урынлашҡан Иҫке Мөхәмәт, Ҡурғаш, Иҙрис ауылдарына газ үткәрелә, юлдарға асфальт түшәлә. Район эсендә һәм күрше райондарға, ҡалаларға яңы автобус маршруттары асылды.

Үрге Ҡыйғы ауылында мәсет төҙөүҙә Дәүләт Йыйылышы депутаттары И.Ә. Әҙеһәмов һәм Р.З. Камалов ҙур ярҙам күрһәтте. Шулай уҡ район халҡынан йыйылған 40 мең һумдан артыҡ хәйер аҡсалары ла был маҡсатта файҙаланылды.

Район күләмендә ни бары бер мәхәллә йорто Абҙай ауылында һаҡланып ҡалғайны. Унда әлегә тиклем балалар баҡсаһы урынлашҡан булһа, баҡса өсөн яңы бина төҙөгәндән һуң ошо йорт дин тотоусыларға кире ҡайтарылып бирелде.

Башҡортостан Республикаһында Ғаилә йылын үткәреү, әсәлекте һәм балалыҡты яҡлауҙы көсәйтеү тураһында Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов ҡул ҡуйған Указ нигеҙендә район хакимиәте башлығы тарафынан был мәсьәлә буйынса ҡарарҙар ҡабул ителде, ойоштороу комитеты һайланды һәм күп балалы ғаиләләргә, яңғыҙ әсәләргә матди ярҙам күрһәтеү күҙҙә тотолдо, уларға арналған кисәләр, йыйылыштар уҙғарылды. Әсәләр көнө бөтә ауылдарҙа ла ҙур милли байрамға әйләнде.

Һуңғы йылдарҙа йәшәү яғы бик еңелдән булмаһа ла, район хакимиәтенең тырышлығы менән физкультура-һауыҡтырыу комплексы сафҡа индерелде. Унда райондың спорт һөйөүселәре генә шөғөлләнмәй, спорт буйынса район, төбәк ярыштары ла үткәрелә.

Заманыбыҙ йәштәргә хеҙмәт тәрбиәһе биреү мәсьәләһен иғтибарҙан ситтә ҡалдырмауҙы талап итә. Мәктәп яны участкаларында уҡыусылар тарафынан ашхана өсөн йәшелсә-емеш етерлек үҫтерелеп алына. Мәктәптәр, хужалыҡтарҙан ер алып, кәбеҫтә, картуф һәм башҡа йәшелсә, емеш-еләк үҫтерә һәм уларҙы һатып аҡса эшләй. Был аҡсаларҙы башҡалабыҙ Өфөгә, республикабыҙҙың иҫтәлекле урындарына экскурсияларға барғанда һәм башҡа маҡсаттарҙа файҙаланалар.

Район башҡорттарының һуңғы йылдарҙа милли үҙаңының уяна барыуы, үҙ асылына, аң-белемгә ынтылыуы, эскелеккә, йәмәғәт тәртибен боҙоусыларға, халыҡ милкенә ҡул һуҙыусыларға ҡаршы көрәшеүе, яҡшы йәшәргә тырышыуы иң шатлыҡлыһы.